WWW.BASH.RBSMI.RU шишәмбе, 10 сентябрь, 2019 йыл, № 104 (27656)

1917 йылдың 14 июненән сыға

# Башҡортостан

РЕСПУБЛИКАНЫҢ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ГӘЗИТЕ

12+

Гәзитте ойоштороусылар – Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте

ҺАЙЛАУ-2019

# Халыҡ ныҡлы ҡарарын белдерҙе

## Һайлау асыҡ һәм ҡануниәткә ярашлы уҙҙы



*Баш ҡаланың 334-се һайлау участкаһынан халыҡ ағымы өҙөлмәне.*

*Айрат Нурмөхәмәтов фотоһы.*

**Беҙҙең халыҡ һайлауҙарҙың төрлөһөн күргәне бар. Совет осоронда, бигерәк тә үҙгәртеп ҡороу заманында был тармаҡта аҙ эш башҡарылманы. Республиканың һайлау системаһы ла ваҡыттың етди һынауын лайыҡлы үтте, ошо йылдар эсендә хоҡуҡи база булдырылды, һәм ул артабан камиллаштырыла. Һайлауҙарҙа йәмәғәт күҙәтеүе ойоштороуҙың аныҡ механизмы бар, власть органдары менән тығыҙ бәйләнеш булдырылған. Шулай уҡ һуңғы йылдарҙа республика халҡының сәйәси тормошта йышыраҡ ҡатнашыуына шаһитбыҙ. Ғөмүмән, 8 сентябрҙә төбәктә үткән Берҙәм һайлау көнө асыҡ һәм ҡануниәткә ярашлы һайлау кампанияһын ойоштороуҙың сағыу миҫалы булды, кешеләрҙе социаль-ижтимағи һәм сәйәси процестарға, дәүләт тормошонда ҡатнашыуға йәлеп итеү көүек бурыстар ҙа теүәл үтәлде.**

...8 сентябрҙә иртәнге сәғәт 7-лә республиканың 3434 һайлау участкаһы асылды (шул иҫәптән граждандарҙың ваҡытлыса туҡтаған урындарында – 37 участка). Быға тиклем үк Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһында республика был мөһим сараға тулыһынса әҙер, төбәк властары һәм башҡа тейешле органдар асыҡ һәм легитим һайлау үткәреү өсөн барыһын да эшләгән, хәүефһеҙлек мәсьәләләренә лә ҙур иғтибар бүленәсәк, тип белдергәйнеләр.

Һайлау участкалары менән бер рәттән баш ҡалала, республиканың Үҙәк һайлау комиссияһы ҡарамағында махсус матбуғат үҙәге эшләй башланы. Ғаризалар буйынса 130 матбуғат сараһы хеҙмәткәрҙәренә 523 аккредитация танытмаһы бирелгән.

Һайлау участкаларындағы йәмәғәт тәртибен һаҡлауға ла ҙур иғтибар бүленгәйне: республика буйынса был ғәмәлдә 8 201 полиция һәм "Росгвардия" хеҙмәткәре тормошҡа ашырҙы. Унан тыш, тағы ла 500 полиция хеҙмәткәре резервта торҙо, йәмәғәт тәртибен һаҡлауҙа 640 шәхси һаҡ хеҙмәткәре лә ҡатнашты.

Билдәле булыуынса, һайлау ваҡыты быйыл иртәнге сәғәт 7-нән киске 9-ға тиклем булды. Һайлау участкаларының ике сәғәткә оҙағыраҡ эшләүе кешеләргә граждандыҡ бурысын үтәүгә өҫтәмә мөмкинлек бирҙе. Былай тәжрибә республикала тәүге тапҡыр ҡулланылды һәм үҙенең һөҙөмтәлелеген иртән үк иҫбатланы: Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Илона Макаренко әйтеүенсә, иртәнге сәғәт 7-нән 8-гә тиклем республикала 64 556 кеше тауыш биргән.

**(Аҙағы 2-се биттә).**

# Һөҙөмтәләр иғлан ителде




**Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Илона Макаренко брифингта һайлау һөҙөмтәләрен иғлан итте.**

Республика халҡы мөһим сарала әүҙем ҡатнашты. Быйыл сарала ҡатнашыусылар һаны 71,80 процент тәшкил итте, шул иҫәптән Өфөлә – 66,15 процент, башҡа ҡалаларҙа – 63,30 процент, районлар буйынса – 77,78 процент.

Айырып әйткәндә, ҡалалар араһында тауыш биреүселәр һаны буйынса Сибай беренсе урында – 83,51 процент, ә иң түбән күрһәткес Межгорьела – 37,94 процент. Райондарҙан Тәтешлегә етеүселәр булманы, бында тауыш биреү хоҡуғына эйә булған граждандарҙың 97,01 проценты һайлауҙа ҡатнашҡан, икенсе баҫҡысты Салауат биләй – 94,26 процент, өсөнсөлә Баҡалы килә – 92,78 процент, ә түбән күрһәткес Благовещенда – 61,14 процент.

Башҡортостан Республикаһы Башлығы вазифаһына дәғүә иткән кандидаттар араһында тауыштар ошолай бүленде: Радий Хәбиров ("Берҙәм Рәсәй" партияһы) – 1 794 113 (82,02 процент), Юнир Ҡотлоғужин (КПРФ) – 150 679 (6,89 процент), Иван Сухарев (ЛДПР) – 99 158 (4,53 процент), Зөлфиә Ғайсина ("Яблоко" партияһы) – 33 371 (1,53 процент), Юрий Игнатьев ("Ғәҙел Рәсәй" партияһы) – 26 935 (1,23 процент), Рәфис Ҡадиров ("Рәсәй патриоттары" партияһы) – 24 032 (1,10 процент), Владимир Барабаш ("Граждандар көсө" партияһы) – 21 175 (0,97 процент), Владимир Кобзев (Рәсәй пенсионерҙарының социаль ғәҙеллек өсөн партияһы) 17 678 (0,81 процент).

Башҡортостандың Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай депутаты итеп 9-сы Ҡояшлы һайлау округынан Фәрит Ғиндуллин (18 816 тауыш, 55,16 процент), 16-сы Октябрьский һайлау округынан Рөстәм Әхмәҙинуров (24 884 тауыш, 6,21 процент) һайланды.

**Рәмилә МУСИНА.**



Радий Хәбиров – 82,02%.



Юнир Ҡотлоғужин – 6,89%



Иван Сухарев – 4,53%



Зөлфиә Ғайсина – 1,53%



Юрий Игнатьев – 1,23%



Рәфис Ҡадиров – 1,10%



Владимир Барабаш – 0,97%



Владимир Кобзев – 0,81%

ТОРМОШ ҺУЛЫШЫ

## Дмитрий Медведев Радий Хәбировҡа уңыш теләне

**Берҙәм һайлау көнөнөң алдан билдәләнгән йомғаҡтары буйынса, "Берҙәм Рәсәй" партияһы үҙенең лидерлыҡ позицияһын һаҡлай һәм илдең төп сәйәси көсө булып ҡала.**

Был хаҡта партия рәйесе, Рәсәй Хөкүмәте Премьер-министры Дмитрий Медведев белдерҙе.

"Берҙәм Рәсәй" вәкилдәре өсөн тауыш биргән һәр кемгә рәхмәт, – тине Премьер-министр. – Партияға булышлыҡ ҡылыуҙы дауам итеүегеҙҙе баһалайбыҙ. Әлбиттә, был беҙгә киләсәктә лә дөрөҫ ҡарарҙар ҡабул итергә нигеҙ булып торасаҡ".

Кәңәшмә барышында Радий Хәбиров Башҡортостандағы тауыш биреүҙең һөҙөмтәләре тураһында хәбәр итте. "Әлегә һайлауҙа ҡатнашыу кимәленең етмеш процент тәшкил иткәне билдәле. Йәғни 2,1 миллион самаһы кеше килде. Беҙ был һөҙөмтәгә бик шатбыҙ. Экзитполдар мәғлүмәттәре буйынса, "Берҙәм Рәсәй" өҫтөнлөклө еңеү алды. Шуға ла киләсәккә ышаныс менән ҡарайбыҙ һәм һуңғы һөҙөмтәләрҙе көтәбеҙ", – тине ул.

Рәсәй Хөкүмәте Премьер-министры: "Беҙ һеҙгә һәм барлыҡ коллегаларыбыҙға Башҡортостанды үҫтереүҙә ҙур уңыш теләйбеҙ", – тине.

Радий Фәрит улы Дмитрий Медведевҡа рәхмәт белдерҙе һәм уны Өфөлә сентябрь аҙағында уҙасаҡ ШОС һәм БРИКС илдәре төбәктәренең V бөләкәй бизнес форумында ҡатнашырға саҡырҙы.

## Хөкүмәт составы әллә ни үҙгәрмәйәсәк

**Башҡортостан Хөкүмәтенең теүәл составы 19 сентябргә билдәле буласаҡ. 8 сентябрҙә һайлау участкалары ябылғас та матбуғат үҙәгендә төбәк етәксеһе Радий Хәбиров ошо турала белдерҙе.**

— Мин еңгән осраҡта Хөкүмәттең төп составы әүәлгесә ҡаласаҡ, — тине ул. — Был кешеләрҙең һәләтлелеген тойҙом, улар менән эшләргә була.

Радий Хәбиров әйтеүенсә, һайлауҙа еңгән осраҡта ул 2024 йылға тиклем Башҡортостандың үҫеш стратегияһын күҙаллаған указға ҡул ҡуйырға ниәтләй. Документ 2024 йылға республиканың ниндәй булырға тейешлеген билдәләйәсәк, иҡтисад, һаулыҡ һаҡлау, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ өлкәһендәге бөтә мәсьәләләрҙе үҙ эсенә аласаҡ.

## Андрей Назаровҡа ышаныс күрһәтелде

**Республика Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары вазифаһын башҡарыусы итеп Андрей Назаров тәғәйенләнде. Хөкүмәттә үткән оператив кәңәшмәлә төбәк етәксеһе Радий Хәбиров ошо турала белдерҙе.**

Андрей Геннадьевич Назаров 1970 йылдың 28 апрелендә Баймаҡта тыуған. "Эшлекле Рәсәй" Дөйөм Рәсәй йәмәғәт ойошмаһы рәйестәше, сәйәсәт фәндәре кандидаты. Төрлө йылдарҙа Силәбе өлкәһенең Магнитогорск ҡалаһында Башҡортостан вәкиллеге етәксеһе, Башҡортостандың эшҡыуарлыҡ ойошмалары ассоциацияһы рәйесе, Стратегик эшләнмәләр үҙәге етәксеһе, Дәүләт Думаһы депутаты, Башҡортостан эшҡыуарлыҡ ойошмаларының Координация советы рәйесе, "Берҙәм Рәсәй" партияһының Социаль-консерватив сәйәсәт үҙәге координаторы, "Эшлекле Рәсәй" ойошмаһы рәйесе урынбаҫары, Башҡортостан Президентының инвестиция хеҙмәттәшлеге мәсьәләләре буйынса махсус вәкиле була.

"Гранель" компаниялар төркөмөнөң Директорҙар советы рәйесе. "Бизнес коррупцияға ҡаршы" йәмәғәт ғәмәлдәре үҙәгенең башҡарма рәйестәше. Рәсәй юристары ассоциацияһының Башҡортостан төбәк бүлексәһе рәйесе. Ялта халыҡ-ара иҡтисади форумы фонды идараһы рәйесе.

## Әбейҙәр сыуағы башландымы?

**Синоптиктарҙың мәғлүмәттәренә ҡарағанда бөгөн республикала бер аҙ ҡыҫҡа ваҡытлы ямғыр яуыуы көтөлә.**

Ел йүнәлешен үҙгәртеүсән, яуым-төшөм ваҡытында көсәйә. Һауа температураһы төндә 6-11, аяҙыҡанда бер градусҡа тиклем, көндөҙ иһә 14-19 градус йылы була.

**Д. ИШМОРАТОВА, Л. ДӘҮЛӘТБӘКОВА әҙерләне.**

МАТБУҒАТ-2020

## "Йома" 24 битлек була!

**Хөрмәтле гәзит уҡыусылар!**

2020 йылдың тәүге яртыһына матбуғатҡа яҙылыуҙың төп осоро башланды. Шаршамбы менән йома һандары ҡушылып, "Башҡортостан-Йома" 24 битлек булып сығасаҡ. Аҙнаһына ике тапҡыр баҫыласаҡ гәзитебеҙгә яҙылып, уға тоғро ҡалған дуҫтарыбыҙға матур бүләктәр әҙерләнек. Квитанция күсермәһен редакцияға ебәргән тәүге 50 кеше 2020 йылға "Башҡортса дини календарь" алып ҡыуанасаҡ. Унан тыш "Аҙна һайын бүләк" һәм йыл аҙағында лотереяла төрлө ҡиммәтле бүләктәр уйнатыласаҡ.

Квитанция күсермәһен редакцияға почта, WhatsApp ҡушымтаһы аша 8-917-790-15-71 телефон һанына, электрон адресҡа (bashgazet@mail.ru) ебәрергә була. Белешмәләр өсөн телефон: 273-83-92.

**Хаҡтар түбәндәгесә:**

**П2729 индексы (аҙнаһына ике тапҡыр) – 1437 һум 90 тин.**

**П3030 индексы – йома (аҙнаһына бер тапҡыр) – 780 һум 96 тин.**

**П3372 индексы (бер йылға) – 2652 һум 32 тин.**

**Ветерандар өсөн П2729 индексы — 1301 һум 52 тин, П3030 индексы — 703 һум 98 тин.**

**Электрон версия – 834 һум (rbsmi.ru сайтына инеп йәки редакция аша яҙылырға мөмкин).**

**БЕРГӘ БУЛДЫҠ – БЕРГӘ ҠАЛАЙЫҠ!**

